# Әлшәй районы Раевка ауылының

# Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге башҡорт лицейында

# эшләүсе «Йәйләү» профилле лагерының

# эшенә анализ-2017 йыл




**2016 йылда, Республика кимәлендә уҙғарылған “Иң яҡшы лагерь” конкурсында, Әлшәй районы Раевка ауылының Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге башҡорт лицейында эшләүсе «Йәйләү» профилле лагеры I урын яуланы.**



ПОЧЕТНАЯ ГРАМОТА

МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

НАГРАЖДАЕТ

*Профильный лагерь «ЙӘЙЛӘҮ»*
муниципального бюджетного общеобразовательного учреждения Башкирский лицей имени М. Бурангулова муниципального района Альшеевский район Республики Башкортостан,

занявший I место

в Республиканском межведомственном конкурсе организаций отдыха и оздоровления детей на звание **«Лучшая организация отдыха и оздоровления детей Башкортостана» в номинации «Специализированные (профильные) лагеря»**

Министр 2016 год Г. Р. Шафикова

Приказ МО РБ №1354 от [illegible]



***Республикала балаларҙың ялын һәм һауыҡтырыуҙы ойоштороу буйынса зональ кәңәшмәлә ҡатнашыу***




**Быйыл лагерҙа барлығы  25 бала ял итте, уларҙың 3-тулы булмаған ғаиләнән, 6-күп балалы ғаиләнән, 1-аҙ тьәмин ителгән ғаиләнән, 1-тәрбиәләнеүгә  алынған бала.**

**Эш 14 көнлөк лагерь өсөн тәғәйенләнгән программаға таянып алып барылды.**

**Ял итеүселәрҙең йәше 11-15 араһы.**

**“Йәйләү”ҙең  маҡсаты һәм бурыстары**

Төп маҡсат – туған телдә телмәр байлығын үҫтереү, башҡорт халҡының мәҙәниәтен, тарихын, йолаларын, балалар уйындарын, ижадын, спорт төрҙәрен өйрәнеү, музыка ҡоралдарында уйнап өйрәнеү, боронғо шифалы ризыҡтарҙы әҙерләү серҙәренә төшөнөү, ырыу легендаларын өйрәнеү, халҡыбыҙ шәхестәре, сәнғәт әһелдәре менән танышыу.

***“Йәйләү”зең үҙенсәлеге:***

**а) аралашыу мотлаҡ башҡорт телендә;**

**б) һәр бала бөтөн сараларҙа ла мотлаҡ ҡатнашырға тейеш;**

**в) сараларҙа ҡатнашкан өсөн бер мәрәй бирелә, сараларҙа ҡатнашып, ниндәйҙер баһаларға өлгәшһә, мәрәйҙәр өҫтәлә бара.**

**“Йәйләү” отрядтарға түгел, ырыуҙарға бүленеп эшләне: Меңле, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән.**



Лагерҙа тәжрибәле, компетентлы уҡытыусылар эшләне.

| № | Исемлек | Дәрәжә |
|---|---|---|
| 1. | **Муллағәлина М.Х.** | **Лагерь етәксеһе** |
| 2. | **Сайранова Л. Ә.** | Өлкән әйҙәүсе |
| 3. | **Кирәева И.М.** | **Әйҙәүселәр** |
| 4. | **Ғәзимуллина З.С.** | |
| 5. | **Шәүәлиева З.З.** | |
| 7. | **Шәрәфиева Г.Р.** | **Шәфкәт туташы** |
| 8. | **Ризуанов Ф.Ж.** | **Физкультура укытыусыһы һәм хәүефһеҙлектән ҡурсалаусы** |




**Әйҙәүселәребеҙ балаларға төрлө йырҙар, бейеүҙәр,уйындар өйрәттеләр,ҡыҙыҡлы һәм фәһемле әңгәмәләр ҡорҙолар, күңелле, мауыҡтырғыс саралар, оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙеләр.**










**Ташлы ауылына сәйәхәт ойошторолдо. Мәктәп музейында булғандан һуң, ауыл эргәһендәге быуа янында “Йәйләү батыры” конкурсы үткәрелде. 7 егет араһында көсөргәнешле ярыш булды. Төрлө конкурстарҙа әүҙем ҡатнашып , иң күп мәрәй йыйған Марченко Роман “Йәйләү батыры” тип танылды.**









**“Йәйләү һылыуы” конкурсы ла уҙғарылды. Дүрт конкурсант жюриҙар алдында һынау тоттолар.Төрлө ярыштарҙа әүҙем ҡатнашып, Вәлиәхмәтова Йәмилә “Йәйләү һылыуы” тип танылды.**








**Сусактауға сәйәхәт ойошторолдо. Балалар төрлө уйындар уйнанылар, тау башына менделәр.**






**Миәкә районыныда урынлашҡан Иҙеүкәй менән Мораҙым зыяратына сәйәхәт итеү балалар күңелендә онотолмаҫлыҡ хәтирәләр ҡалдырҙы.**










## Миәкә районы Илсеғол ауылында ҡымыҙ бешеү серҙәрен белделәр. Шифалы ҡымыҙ менән һыйландылар.











**Әлшәй районындағы Чехов санаторияһында республика кимәлендә ойошторолған «Йәйләү» профилле лагерын асыу тантанаһында ҡатнаштыҡ.**














**“Йәйләү”ҙең ағзағында һабантуй һәм йәрминкә ойошторолдо. Балалар һабантуйҙа бик әүҙем ҡатнаштылар. Ярыштарҙа еңеп күберәк мәрәй йыйырға тырыштылар. Ә йәрминкәлә 14 көн буйына йыйылған мәрәйҙәрен әйберҙәргә алмаштырыу, улар өсөн бигерәк тә ҡыуаныслы булды.**







**«Йәйләү» лагеры беҙҙең лицейҙа быйыл икенсе йыл ғына эшләй. Лагерь өсөн махсус программа төҙөлдө. Беҙгә был эш бик оҡшаны.Алдыбыҙға ҡуйылған маҡсатҡа ирешкәнбеҙҙер тип уйлайбыҙ. Киләһе йылға ҙур пландар ҡороп ятабыҙ.**